# *Әлифба байрамы*

***Маҡсат.*** 1. Уҡыусыларҙың аң- кимәлен, логик фекерләүен үҫтереү.

2. Уҡыусыларҙың уңышын йомғаҡлау.

***Йыһаздар.*** Биремдәр, һүрәттәр.

## *Байрам барышы.*

- Ҡәҙерле ата-әсәләр, уҡыусылар! Бөгөн беҙҙә ҙур байрам – 1 класс уҡыусылары үҙҙәренең яҡын дуҫы – Әлифба менән хушлашырға йыйылдылар. Хәҙер инде улар Әлифбалағы һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе , хикәйәләрҙе уҡырға өйрәнделәр.

- Балалар! Һеҙҙе Әлифбаны уңышлы тамамлауығыҙ менән ҡотлайым. Киләсәктә лә тырышып уҡығыҙ. Белем иленең юғары баҫҡысына күтәрелегеҙ!

- Ә хәҙер, балалар, әлифбаны уҡыу осоронда нимәгә өйрәнгәнебеҙҙе күрһәтәйек.

Балаларҙың сығышы. Хор менән «Теләк» шиғырын һөйләү .

Башланып китте уҡыуҙар
«А» тигән хәреф менән.
Атайҙарыбыҙ ҙа беҙҙең
Башлаған ана шунан.

«Я» тигән һуңғы хәрефкә
Барып еттек беҙ бер саҡ,
Бөтә серҙәрен һөйләргә
Асылды беҙгә китап.

Бер уҡыусы ҡулына Әлифба тотоп алға сыға һәм шиғыр һөйләй.

Белдем, Әлифба –
Телдең асҡысы,
Белем иленең
Тәүге баҫҡысы.

Баҫҡысҡа баҫып,
Юғары менәм,
Фән нигеҙенең
Серҙәрен беләм.

Әлифба тураһында йыр.

Уҡытыусы.1 сентябрь көнөн хәтергә төшөрәйек әле. Ул көндө беҙ тәүге тапҡыр мәктәпкә килдек. Уҡый ҙа, яҙа ла белмәй инек әле.Хәҙер беҙ белем иленең беренсе баҫҡысына күтәрелдек. Әлифбаның бөтә хәрефтәрендә танйыбыҙ, әкиәттәрҙе, хикәйәләрҙе шыма, тасуири уҡыйбыҙ.

**1-се** уҡыусы. Беренсе сентябрь көнө
Мәктәпкә килдек.
Ярты йыл үтмәне,
Уҡып, яҙырға белдек.

**2-се укыусы** Әлифба, Әлифба,
Беренсе битеңде

Аҫҡан көн хәтерҙә
Ҙур байрам шикелле.

**3-сө уҡыусы** Хәҙер, әсәй, ҙур үҫтем,
Уҡый-яҙа беләмен.
Әлифбаның биттәрен
Ятҡа һөйләп бирәмен.

Ата-әсә. Балалар! Һеҙ хәҙер бөтәһендә беләһегеҙ. Был уңыштарығыҙ беҙҙе бик шатландыра. Һеҙҙең бөтәгеҙ исеменән һәм ата-әсәләр исеменән ҙур рәхмәт…

Балалар. Беҙҙең уҡытыусыбыҙға!

**4-се укыусы** Ҙур хөрмәт һиңә, уҡытыусы!
Бергәләп һинең менән,
Үтербеҙ әле беҙ бергә
Аяҡ баҫмаған ерҙән!

**5-се укыусы** Эй, ҡәҙерле уҡытыусыбыҙ
Йөрәк һүҙебеҙ ошо.
Дан һиңә, мөхәббәт һиңә
О, беҙҙең баласаҡ дуҫы!

- Хәҙер , уҡыусылар, ата-әсәләребеҙгә һәм ҡунаҡтарға нимәгә өйрәнгәнебеҙҙе күрһәтәйек «*Йондозло сәғәт*» уйынын уйнайыҡ.

## *I тур. Ошо предметтарҙың «Ҡайһыһы артыҡ»*

1 2 3 4









1. Предметтарҙың барыһы ла уҡыу әсбаптары.
2. Ике осонда дүңгәләк, уртаһында бер ҡаҙаҡ. ( ҡайсы)
3. Яҙыр йәнең теләгәнде, яҙыр йыр, яҙыр сәләм.
4. Матур итеп осланған төрлө төҫтәге …(ҡәләм)
5. Дүрт апайға бер яулыҡ. (өҫтәл)

1 2 3 4









1. Көнө буйы туҡ та туҡ,ағастан ҡорт табып туҡ.
   Ағасты йырған ҡортҡа иң ҙур дошман…( тумыртҡа)
2. Гөр-гөр йырлай ул, ҡыҙыл ситек кейә ул.
   Күлдәктәре күгелйем , татыулыҡты һөйә ул.( күгәрсен)
2. Ғүмер буйы оя ҡормай, өй һалмағас, өйҙә тормай.
   Башҡа йортҡа күкәй һала, бала баҡмай йәшәй ала.( кәкүк)
3. Башында тарағы, аяғында һәнәге,
   Йәгеҙ әле, табығыҙ әле шуны .(әтәс)
4. Йорт ҡошон күрһәтегеҙ.
5. Күсер ҡошто табығыҙ.
6. Башҡортостандың ҡайһы районы оса?

1 

2 

3 

4 

1. Был үсемлектәрҙең барыһы ла бүлмә гөлдәре.
2. Был гөлдөң сәскәһе киреһенсә үсә.
3. Яҙ сәскәһен табығыҙ.





1. Урмандан сығып ҡорһаҡ менән шыуып.
   Ҡойроғо һырлы , хәйләһе күп төрлө.(төлкө)
2. Төҫө һоро, ләкин бүре түгел,ҡолаҡтары ҙур, ҡуян да түгел,
   Тояғы бар, ат түгел,урманда йәшәй, бесән ашай.(мышы)
3. Кеше өсөн тырышыр, эшен эшләп булышыр.
   Иргә гел булған ҡанат, исемкәйе…(ат)
4. Урман хужаһы.
5. Барыһы ла урман йәнлектәре.

| 1 | 2 | 3 | 4 |
|---|---|---|---|
| Т | Ф | ҫ | Н |

1. Аҫта бар, өҫтә бар, уртала юҡ.(ҫ)
2. Тәҙрә башында ни тора?(т)
3. Урманда бар , ҡырҙа юҡ, мунсала бар, өйҙә юҡ.(н)
4. Өфөнөң уртаһында нимә тора?(ф)

***III.*** *тур. Хәрефтәрҙән һүҙ төҙө.*

*А,Ә,О, У, С, Л, Р, Ш, Т, Х, И*



***III тур.*** С. Әлибаевтың «Аҡ күбәләк» хикәйәһен күсереп яҙығыҙ.

*Баҡсала*  *бик күп.*  *уларға*  *менән*  *һибә.*  *араһынан аҡ*  *сығып*  *ҡунды. Уны*  *күреп ҡалды.* *ҡурҡып осто. Ул*  *ҡунды.*  *ултырҙы. Ә*  *ҡалмай.*  *, аптырағас,*  *араһынан ап-аҡ*  *ҡунды. Аҡ*  *-*  *аҡ.*  *хайран ҡалды -*  *, ә*  *ҡайҙа һуң?*  *шатланды*  *ярай әле, аҡ*  *бар.*

**Байрамды йомғаҡлау.** Рәхмәт балалар. Һеҙ үҙегеҙҙең һөнәрҙәрегеҙҙе күрһәттегеҙ .Әлифба китабына алмашҡа Туған тел килә, тырышып уҡығыҙ.

Балалар. Һеҙҙең алда вәғәҙә бирәбеҙ,
Ялҡауланмаҫҡа, «икеле» алмаҫҡа,
Тырыш булырға, «бишле» алырға!